Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы

## Ҡайын урманы.

Алыҫта-алыҫта , иртәнге аҡһыл томан артында, күгелйем урман таҫма кеүек булып һуҙылып ята. Бөгөн шул яҡҡа юл тотам әле. Күгелйем урман таҫмаһы - ул аҡ ҡайын урманы. Беҙ ошо ҡайын урманына бәшмәккә йөрөйбөҙ. Бергәләп уҫаҡ урманына барһаҡ та, шыршы, ҡарағай урманын уҙһаҡ та, ҡайын урманына кермәй китмәйбеҙ. Яп-яҡты урман ул. Йылмайып ҡояш сыҡҡанда ла,иртән дә яп –яҡты. Кистәрен шәфәҡ алһыуланһа ла, төндәрен зәңгәр төҫмөр алһа ла –һаман да ул яп-яҡты. Урмандың исеме лә бик матур : Аҡ ҡайын урманы.

Ҡайын урманын бәшмәктәр ҙә ярата. Иң мул булып үҫкәне-ҡайын бәшмәктәре инде. Улар эшләпәнең аҡһылын, һарыһын, көрәнен - төрлө төҫтәгеһен кейәләр.

Ҡайынлыҡта бүтән бәшмәктәр ҙә етерлек үҫә. Күҙҙең яуын алырлыҡ тулҡынҡайҙар тигән бәшмәктәрҙе лә осратырға мөмкин. Аҡһыл ерлектә алһыу тулҡындар кеүек һыҙыҡтар булғанға, ул шулай атала. Бында әтәс бәшмәктәре лә бар. Былары ҡупшы әтәстәргә оҡшағандар.

Ҡайынлыҡта үҫкән аҡ башмәктәрҙе мин бәшмәктәр батшаһы тип атар инем. Урманда үҫкән ҡайындар ҙа аҡ,бәшмәктәр ҙә аҡ. (Ғ.Хәсәновтан) (151 һүҙ)

## Имән.

Имән бик тә күркәм,матур һәм ныҡ ағас ул. Имәнгә оҡшаталар ирҙәрҙең аҫылын: имән кеүек ныҡ, тиҙәр.

Беҙҙең ауыл янындағы туғай уртаһында бәһлеүән бер имән үҫә. Ул ауылдың түбән осонан уҡ күренә. Бер ағас та ышыҡлай алмай уны, ел-дауылға ла бирешмәй. Йәй ҡоро килһә лә , әллә ни иҫе китмәй. Дымды әллә ниндәй тәрәнлектән ала ул. Күп һанлы тамыр-тармаҡтарын тәрән ебәргән. Туғайҙы яҙ көнө һыу баҫа, ә ул яртылаш һыуҙа ултыра , шул саҡта кесерәйеп ҡалған кеүек күренә. Ә инде һыу кипкәс , бөтә матурлығы менән яңынан ҡалҡып сыға.

Рус мәктәбенең 9-сы классы өсөн диктант текстары
М.Ғ.Ғимәлова "Изложениелар өсөн текстар йыйынтығынан"алынды.

Ул имән нисә йәштә тиһәң , бер кем дә әйтә алмай. Мин уның нисә йәштә булыуын атайымдан да һорағайным. Ул да яуап бирә алманы. Ҡасандыр ул үҙе лә атаһынан шулай төпсөнгән икән.

Имән өс йөҙ йылға тиклем сәскә ата. Егерме-утыҙ йәшендә башлай ҙа, йыл һайын арымай-талмай сәскә ата. (Э.Шим) (137 һүҙ)